АНПОО «БИРСККООПТЕХНИКУМ»

Подписан цифровой подписью: АНПОО "
БИРСККООПТЕХНИКУМ"
DN: ИНН ЮЛ=0257995189, СНИЛС=02873395380,
ОГРН=1120200002812, ИНН=021301877488, C=
RU, S=02 Республика Башкортостан, L="
БИРСКИЙ РАЙОН, БИРСК ГОРОД", STREET="
КИРОВА УЛИЦА, 20, -, -", O="АНПОО ""
БИРСККООПТЕХНИКУМ""", CN="АНПОО ""
БИРСККООПТЕХНИКУМ""", T=ДИРЕКТОР, G=
РЕЗЕДА ГИРАТОВНА, SN=АХУНОВА
Основание: Я подтверждаю этот документ своей
удостоверяющей подписью
Расположение:
Дата: 2024.11.05 12:19:22+05'00'
Foxit PDF Reader Версия: 2023.3.0

**УТВЕРЖДЕНО**
**Заместитель директора по УМР**
**________________ А.А. Лутфулина**
**«___»_______________ 20__ г.**

# Комплект контрольно-оценочных средств по учебной дисциплине

## ОГСЭ. 06 Башкирский язык

программы подготовки специалистов среднего звена (ППССЗ)
по специальности СПО
**38.02.04 Коммерция (по отраслям)**

***базовый***

(уровень подготовки)

БИРСК 2024

Комплект контрольно-оценочных средств разработан на основе Федерального государственного образовательного стандарта среднего профессионального образования по специальности СПО 38.02.04 Коммерция (по отраслям) базовой подготовки и программы учебной дисциплины ОГСЭ. 06 Башкирский язык

Организация-разработчик: АНПОО «Бирский кооперативный техникум»

**СОДЕРЖАНИЕ**

**1.Паспорт комплекта контрольно-оценочных материалов …………………………………….…4**
**1.1 Область применения контрольно- оценочных материалов………………………………………4**
**1.2.Цели и задачи дисциплины – требования к результатам освоения дисциплины….……….……4**
**2. Результаты освоения учебной дисциплины, подлежащие проверке …………..............................6**
**2.1 Сводные данные об объектах оценивания, основных показателях оценки, типах заданий, формах аттестации…………………………………………………………………………………..…..6**
**3.Оценка освоения учебной дисциплины…………………………………….……..…………..……..7**
**3.1. Формы и методы оценивания ………………………………………………………………………..7**
**3.2. Контроль и оценка результатов освоения учебной дисциплины по темам………………………8**
**3.3. Вопросы для подготовки к зачету по учебной дисциплине……………………...……..………11**

**4. Контрольно - оценочные материалы для проведения текущего контроля ………………………13**
**5. Информационное обеспечение обучения…………………………………………………..………42**

**6. Лист регистрации изменений…………………………………………………………………..………44**

**1. Контроль-үлсәү материалдарының комплект паспорты**

**1.1 Тәҡдим ителгән контроль-эш материалдары башҡорт телен студенттар тарафынан үҙләштереүҙе тикшереү өсөн төҙөлгән.**

**1.2 Башҡорт телен өйрәтеүҙең маҡсаты һәм бурыстары:**

Студенттар түбәндәге күнекмәләргә **эйә булырға тейеш:**

1. башҡорт теленең үҙенсәлекле өндәрен, хәрефтәрен белеү, телмәрҙә ҡуллана алыу;
2. сингармонизм законын практик эштә ҡуллана белеү;
3. программала тәҡдим ителгән темалар, ситуациялар буйынса һүҙҙәрҙе, һүҙбәйләнештәрҙе дөрөҫ әйтә һәм ҡуллана белеү;
4. һүҙҙәрҙең мәғәнәһенә ҡарап, уларҙы телмәрҙә, диалогта, ситуатив аралашыуҙа ҡуллана алыу;
5. тәҡдим ителгән ситуацияға бәйләп, диалог, монолог, хикәйә төҙөй белеү;
6. һөйләмдәрҙә һүҙ тәртибен үҙләштереү; һорау, хәбәр, өндәү һөйләмдәрҙе дөрөҫ интонация менән уҡыу һәм һөйләү; был һөйләмдәр аҙағында тыныш билдәләрен ҡағиҙәгә ярашлы ҡуя белеү;
7. дөрөҫ һәм тасуири уҡыу, уҡығандың йөкмәткеһен һөйләү;
8. һорау һәм яуап бирә алыу;
9. йәнле телмәрҙе тыңлау һәм төшөнөү; тексты уҡыу, аңлау һәм йөкмәткеһен һөйләү;
10. һүрәттәр, картиналар буйынса һөйләм, хикәйә төҙөү;
11. ҙур булмаған изложениелар, бирелгән темаға инша яҙыу;
12. рәсми йәки эш ҡағыҙҙарын (ғариза, протокол, акт, автобиография, характеристика, справка һ.б.) яҙа белеү;
13. башҡорт телендә яҙма йәки телдән сығыш яһау.

Студенттар **белергә тейеш:**

14. башҡорт теленең үҙенсәлекле өндәрен, хәрефтәрен белеү, дөрөҫ әйтеү ҡағиҙәләрен;
15. сингармонизм законын үҙләштереү;
16. программала тәҡдим ителгән темалар, ситуациялар буйынса һүҙҙәрҙе, һүҙбәйләнештәрҙең дөрөҫ әйтелешен һәм ҡулланылышын белеү;
17. һүҙҙәрҙең мәғәнәһен, уларҙың телмәрҙә, диалогта, ситуатив аралашыуҙа ҡуллана алыныуы;
18. тәҡдим ителгән ситуацияға бәйләп, диалог, монолог, хикәйә төҙөй белеү;
19. һөйләмдәрҙә һүҙҙәр тәртибен; һорау, хәбәр, өндәү һөйләмдәрҙең дөрөҫ интонация менән уҡылыуын; һөйләмдәрҙә тыныш билдәләренең ҡағиҙәгә ярашлы ҡуйылыуын;
20. дөрөҫ һәм тасуири уҡыу, уҡығандың йөкмәткеһен һөйләү;
21. һүрәттәр, картиналар буйынса һөйләм, хикәйә төҙөү;
22. ҙур булмаған изложение, бирелгән темаға иншаларҙың дөрөҫ яҙылыуын;
23. рәсми йәки эш ҡағыҙҙарын (ғариза, протокол, акт, автобиография, характеристика, справка һ.б.) яҙа белеү;

| Код и наименование формируемых компетенций | Планируемые результаты освоения дисциплины |
|---|---|
| ОК 01. Выбирать способы решения задач профессиональной деятельности применительно к различным контекстам | - использовать на практической работе закон сингармонизма; |
| ОК 03. Планировать и реализовать собственное профессиональное и личностное развитие, предпринимательскую деятельность в профессиональной сфере, использовать знания по финансовой грамотности в различных жизненных ситуациях | - выразительно прочитать и рассказывать содержание;<br>- усвоить порядок слов, правильно ставить знаки препинания, также с интонацией уметь читать предложения;<br>- применение полученных коммуникативных умений и навыков на практике; |
| ОК 04. Эффективно взаимодействовать и работать в коллективе и команде. | - дальнейшее развитие и совершенствование способности и готовности к речевому взаимодействию и социальной адаптации; готовности к трудовой деятельности, осознанному выбору профессии; навыков |

| | |
|---|---|
| | самоорганизации и саморазвития; информационных умений и навыков. |
| ОК 05. Осуществлять устную и письменную коммуникацию на государственном языке РФ с учетом особенностей социального и культурного контекста. | - совершенствование умений обучающихся осмысливать закономерности языка, правильно, стилистически верно использовать языковые единицы в устной и письменной речи в разных речевых ситуациях; |
| ОК 06. Проявлять гражданско-патриотическую позицию, демонстрировать осознанное поведение на основе традиционных общечеловеческих ценностей, в том числе с учетом гармонизации межнациональных и межрелигиозных отношений, применять стандарты антикоррупционного поведения. | - формирование российской гражданской идентичности в поликультурном обществе<br>- совершенствование видов речевой деятельности, коммуникативных умений и культуры речи на родном (башкирском) языке; |
| ПК 1.2. Устанавливать хозяйственные связи с поставщиками и потребителями товаров и услуг, в том числе с применением коммуникативных возможностей искусственного интеллекта | - составление деловых писем, предложений, заказов на поставку товаров, проведения безналичных расчетов |
| ПК 1.3. Осуществлять подготовку, оформление и проверку закупочной документации, в том числе с использованием электронного документооборота и сквозных цифровых технологий | - составление и оформление закупочной документации, осуществление ее проверки для проведения закупочной процедуры, организационно-технического обеспечения деятельности закупочных комиссий;<br>осуществление подготовки протоколов заседаний закупочных комиссий на основании решений, принятых членами комиссии по осуществлению закупок |

**2. Материалды үҙләштереүгә контроль һәм билдә**
**2.1 Уҡытыуҙың һөҙөмтәһе (үҙләштерелгән белемдәр), уҡытыуҙа контроль һәм белем кимәлен билдәләү ысулдары һәм формалары, эш төрҙәре, аттестация формаһы.**

| Уҡытыуҙың һөҙөмтәһе (үҙләштерелгән белемдәр) | Уҡытыуҙа контроль һәм белем кимәлен билдәләү ысулдары һәм формалары | Эш төрҙәре | Аттестация формаһы |
|---|---|---|---|
| **Студенттар түбәндәге күнекмәләргә эйә булырға тейеш:** | | | |
| башҡорт теленең үҙенсәлекле өндәрен, хәрефтәрен белеү, телмәрҙә ҡуллана алыу;<br>программала тәҡдим ителгән темалар, ситуациялар буйынса һүҙҙәрҙе, һүҙбәйләнештәрҙе дөрөҫ әйтә һәм ҡуллана белеү;<br>һүҙҙәрҙең мәғәнәһенә ҡарап, уларҙы телмәрҙә, диалогта, ситуатив аралашыуҙа ҡуллана алыу;<br>тәҡдим ителгән ситуацияға бәйләп, диалог, хикәйә төҙөй белеү;<br>дөрөҫ һәм тасуири уҡыу, уҡығандың йөкмәткеһен һөйләү;<br>һорау һәм яуап бирә алыу;<br>һүрәттәр, картиналар буйынса һөйләм, хикәйә төҙөү;<br>ҙур булмаған изложениелар, диктант, бирелгән темаға инша яҙыу;<br>рәсми йәки эш ҡағыҙҙарын (ғариза, протокол, акт, автобиография, характеристика, справка һ.б.) яҙа белеү;<br>башҡорт телендә яҙма йәки телдән сығыш яһау. | -телмәр нормаларын телмәрҙә ҡулланыу;<br>-башҡорт теленең төп орфоэпик, лексик һәм грамматик нормаларын практикала ҡулланыу;<br>-башҡорт теленең орфографик һәм пунктуацион нормаларын телмәрҙә (практикала) ҡулланыу. | Практик эш, аудитор, үҙ аллы эш (тестар, күнегеүҙәр, яҙма эштәр) | Зачет |
| **Студенттар белергә тейеш:** | | | |
| башҡорт теленең үҙенсәлекле өндәрен, хәрефтәрен белеү, дөрөҫ әйтеү ҡағиҙәләрен;<br>программала тәҡдим ителгән темалар, ситуациялар буйынса һүҙҙәрҙе, һүҙбәйләнештәрҙең дөрөҫ әйтелешен һәм ҡулланылышын белеү;<br>һүҙҙәрҙең мәғәнәһен, уларҙың телмәрҙә, диалогта, ситуатив аралашыуҙа ҡуллана алыныуы;<br>тәҡдим ителгән ситуацияға бәйләп, диалог, хикәйә төҙөй белеү;<br>дөрөҫ һәм тасуири уҡыу, уҡығандың йөкмәткеһен һөйләү;<br>һүрәттәр, картиналар буйынса һөйләм, хикәйә төҙөү;<br>ҙур булмаған изложение, диктант, бирелгән темаға иншаларҙың дөрөҫ яҙылыуын; | -телдең нормаларын телмәрҙә ҡуллана, анализ яһай белеү;<br>-телдән һәм яҙма диалогтар төҙөү, инша, диктант, диалог яҙа белеү. | Практик эш, аудитор, үҙ аллы эш, контроль эш | |
| рәсми йәки эш ҡағыҙҙарын (ғариза, протокол, акт, автобиография, | | | |

| | | | |
|---|---|---|---|
| характеристика, справка һ.б.) яҙа белеү; | | | |

**3.Дисциплинаны үҙләштереү буйынса баһалау:**

**3.1.Яуаптарҙы билдәләү буйынса формалар һәм методтар**

Башҡорт теле дисциплинаһын үҙләштереүҙе тикшереү практик эштәр, тестар эшләү, һорау алыу, үҙ аллы эштәрҙе билдәләү ярҙамында башҡарыла.

Инеш контроль уҡыусыларҙың мәктәптә алған белемдәрен тикшереүгә һәм баһалауға ҡоролған.

Ағымдағы контроль уҡыусыларҙың белемдәрен тикшереүгә, тағыла арттырыуға ҡоролған.Шулай уҡ контроль үҙ аллы эшләүҙе үҫтерә, уҡытыусы менән уҡыусы араһындағы бәйләнеште арттыра һәм нығыта.

Рубеж контроль яҙма эштәр эшләү буйынса үткәрелә (шулай уҡ тестар).

Дисциплина буйынса йомғаҡлау аттестацияһының формаһы - дифференцион зачет.

| **Уҡытыуҙың һөҙөмтәһе (үҙләштерелгән белемдәр)Результаты обучения** | **Уҡытыуҙа контроль һәм белем кимәлен билдәләү ысулдары һәм формалары Формы и методы контроля и оценки результатов обучения** |
|---|---|
| **Студенттар түбәндәге күнекмәләргә эйә булырға тейеш:Результаты** освоения содержания учебной дисциплины: | |
| - воспитание уважения к башкирскому языку, который сохраняет и отражает культурные и нравственные ценности, осознание связи языка и истории, культуры башкирского и других народов;<br>- понимание роли башкирского языка как основы успешной социализации личности;<br>- использование закон сингармонизма в речи;<br>- осознание эстетической ценности, потребности сохранить чистоту башкирского языка как явления национальной культуры;<br>- формирование мировоззрения, соответствующего современному уровню развития науки и общественной практики, основанного на диалоге культур, а также различных форм общественного сознания, осознание своего места в поликультурном мире;<br>- способность к речевому самоконтролю; оцениванию устных и письменных высказываний с точки зрения языкового оформления, эффективности достижения поставленных коммуникативных задач;<br>Принятие традиционных национальных, общечеловеческих гуманистических ценностей | Практическая работа, устный опрос;<br>подготовка рефератов, докладов;<br>тестирование;<br>работа со словарями;<br>выполнение упражнений;<br>написание творческих работ; самостоятельная работа;<br>выполнение заданий дифференцированного зачета |

## 3.2. Темалар буйынса дисциплинаны үҙләштереүҙә контроль һәм билдә.

Таблица 2

| Уҡыу дисциплинаһының элементтары | Контроль формалары һәм ысулдары | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|
| | Текущий контроль | | Рубежный контроль | | Промежуточная | |
| | Контроль формаһы | Белемде тикшереү У, З | Контроль формаһы | Белемде тикшереү У, З | Контроль формаһы | Белемде тикшереү У, З |
| **I бүлек. Инеш. Башҡорт теле. Фонетика.**<br><br>**Тема 1.1.Инеш. Башҡорт теле. Танышыу.** | **Практик эш№1:** һөйләмдәр төҙөү; | *У 1, З 1* | | | **Диффирицион зачет** | *У 1, У2, У 3 У 4, У5, У 6, У7, У 8, У9, У 10, З 1,З 2, З 3 З4,З 5, З 6; З 7, З8, З 9, З 10* |
| **Тема 1.2.Үҙем тураһында. Алфавит.** | **Практик эш№2:** “Мин” хикәйә төҙөү | *У 1,З 4* | | | | |
| **Тема 1.3.Был кем? Башҡорт теленең өн-хәрефтәре.** | **Практик эш№3:** “Был кем?” темаһына диалог төҙөү; | *У1, З 6* | | | | |
| **Тема 1.4. Гүзәл Өфөм – баш ҡалам. Сингармонизм законы.** | **Практик эш№4:** һүҙҙәрҙе күсереп алыу; | *У 1, У2, З 2* | | | | |
| **Тема 1.5. Минең дуҫтарым. Һүҙҙең төҙөлөшө.** | **Практик эш№5:** “Минең дуҫым” темаһына хикәйә төҙөү; | *У 3, У4, У10, З 3* | | | | |
| **Тема 1.6.Мәктәптә (техникумда). Яҙыу ҡағиҙәләре.** | **Практик эш№6:** “Уҡыу йорттары” текстан һүҙҙәрҙе яҙып алыу; | *У6, З 4, З 3* | | | | |
| **Тема 1.7. Башҡортостан. Ижек.** | **Практик эш№7:** һүҙҙәрҙе ижектәргә бүлеү; | *У 4, З 6* | | | | |
| **Тема 1.8. Көн тәртибе. Баҫым.** | **Практик эш№8:** баҫым ҡуйып, һүҙҙәрҙе күсереү; | *У 5, У7, З 6* | | | | |
| **Тема 1.9. Һиңә нисә йәш? Һандар.** | **Практик эш№9:** һандарҙы һүҙ менән яҙыу; | *У 8, У9, У 4, З 6* | | | | |
| **Тема 1.10. -"Һаулығың-байлығың”. Һан төркөмсәләре.** | **Практик эш№10:** һандарҙың төркөмсәһен билдәләү; | *У 10, З 2* | | | | |
| **Тема 1.11. -"Башҡортостан тәбиғәте”. Һандарҙың дөрөҫ яҙылышы.** | **Практик эш№11:** һандарҙы дөрөҫләп яҙыу; | *У 3, З 10* | **Контроль эш№1.** Тема:”Фонетика, лексика, һан”. | *У 1, У2, У6, У 3, З 1, З 2, З 3* | | |
| **II бүлек. Морфология. Үҙ аллы һүҙ төркөмдәре** | | | | | | |
| **Тема 2.1. Минең ғаиләм. Исем.** | **Практик эш№12:** өлгө буйынса һөйләмдәр төҙөп яҙыу; | *У 4, У5, У 6, У 11 З 1, З 10, З 11* | | | | |
| **Тема 2.2. Исемдәрҙең һан менән үҙгәреше.** | **Практик эш№13:** өлгө буйынса һүҙҙәргә ялғауҙар яҙыу; | *У 9, У2, З 11, З 2,* | | | | |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| **Тема 2.3. Ваҡыт ҡәҙерен белегеҙ. Исемдәрҙең эйәлек заты категорияһы.** | **Практик эш№14:** өлгө буйынса һүҙҙәрҙе зат менән үҙгәртеү; | *У 1, У7, З 1,З 7* | | | |
| **Тема 2.4. Исемдәрҙең хәбәрлек заты категорияһы.** | **Практик эш№15:** һүҙҙәргә ялғауҙар өҫтәп яҙыу; | *У 1, У9, З 1,З 9* | | | |
| **Тема 2.5. Спорт һәм мин. Исемдәрҙең килеш менән үҙгәреүе.** | **Практик эш№16:** бирелгән һүҙҙәрҙе килеш менән үҙгәртеү; | *У 1, У2, У3, З 2, З 1* | **Контроль эш№2.** Тема:”Фонетика, һан, исем”. | *У 1, У2, У7, З 1,З 2,* | |
| **Тема 2.6. Кеҫә телефоным. Ҡылым.** | **Практик эш№17:** ҡылымдарға һорауҙар яҙыу, күнегеүҙәр эшләү; | *У 4, У5, У 10, З 1, З 2, З 5* | | | |
| **Тема 2.7. Ҡырағай хайуандар. Ҡылымдың зат һәм хәҙерге заман менән үҙгәреүе.** | **Практик эш№18:** һүҙҙәрҙе заман менән үҙгәртеү; | *У 1, У4, У 10, З 7,З 8,* | | | |
| **Тема 2.8. Яраткан яҙыусым. Ҡылымдың киләсәк заман формаһы.** | **Практик эш№19:** һүҙҙәрҙе киләсәк заман менән үҙгәртеп; | *У 1, У7, У3, З 1, З 7, З 3* | | | |
| **Тема 2.9. Яраткан спортсменым. Ҡылымдың билдәле үткән заман формаһы.** | **Практик эш№20:** ҡағиҙә буйынса күнегеүҙәр эшләү; | *У 7, У2, У 9, З 2, З 9* | | | |
| **Тема 2.10. Спорт уйындары. Ҡылымдың билдәһеҙ үткән заман формаһы.** | **Практик эш№21:** ҡағиҙә буйынса күнегеүҙәр эшләү; | *У2, У 7, У 8, З 2, З 7* | | | |
| **Тема 2.11. Һүҙ төркөмдәре (исем, ҡылым, һан) ҡабатлау.** | **Практик эш№22:** күнегеүҙәр эшләү; дәрестә ни өсөн булмауың хаҡында аңлатма яҙыу. | *У 1, У 2, У 11, З12, З 11* | | | |
| **Тема 2.12. Яраткан байрамдарыбыҙ. Сифат.** | **Практик эш№23:** текстан сифаттарҙы табып яҙыу | *У 11, У 1, У 4, У 3, З 1, З 11* | | | |
| **Тема 2.13. Сифат төркөмсәләре.** | **Практик эш№24:** сифат төркөмсәләрен айырып яҙыу; | *У 1, У 2, З 1,З 2* | | | |
| **Тема 2.14. Мин студент. Сифат дәрәжәләре.** | **Практик эш№25:** сифат дәрәжәләрен айырып яҙыу; | *У 1, У 4, У 7, З 1, З 7* | | | |
| **Тема 2.15. Башҡортостанда театрҙар. Исем, сифат һәм ҡылымдарҙың телмәрҙәге роле.** | **Практик эш№26:** һөйләмдәрҙән сифат, исем һәм ҡылымдарҙы яҙып алыу; | *У 1, У 5, У 6, З 1, З 5* | **Контроль эш№3.** Тема: “Һүҙ төркөмдәре(ҡылым, сифат)”. | *У 1, У 6, У3, З 1, З 3* | |
| **Тема 2.16. Алмаш. Алмаш төркөмсәләре.** | **Практик эш№27:** ҡағиҙә буйынса күнегеүҙәр эшләү; | *У 1, У 2, У 6, З 1, З 2, З 6* | | | |
| **Тема 2.17. Мин һайлаған һөнәр. Һорау алмаштары.** | **Практик эш№28:** күнегеүҙәр эшләү һәм ҡағиҙәне нығытыу; | *У 4, У 7, У 6, З 7, З 4, З 8* | | | |

| | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|
| **Тема 2.18. Ашханала. Билдәһеҙлек, күрһәтеү алмаштары.** | **Практик эш№29:** алмаштарҙың төркөмсәләрен билдәләү; | *У 4, У 7, З 4,З 7* | | | | |
| **III Бүлек. Ярҙамсы һүҙ төркөмдәре** | | | | | | |
| **Тема 3.1. Кейемдәр. Ярҙамсы һүҙәр: бәйләүестәр.** | **Практик эш№30:** текстан бәйләүестәрҙе яҙып алыу; | *У 1, У 3, З 1,З 5,* | | | | |
| **Тема 3.2. Ярҙамсы һүҙәр: теркәүестәр.** | **Практик эш№31:** текстан теркәүестәрҙе яҙып алыу; | *У 1, У 4, З 1,З 4* | | | | |
| **Тема 3.3. Мин бөгөн ашнаҡсы. Ярҙамсы һүҙәр: киҫәксәләр.** | **Практик эш№32:** киҫәксәләрҙе яҙып алыу; | *У 5,У 6, З 5, З 6* | | | | |
| **Тема 3.4. Мөнәсәбәт һүҙәр, ымлыктар.** | **Практик эш№33:** ҡағиҙә буйынса күнегеүҙәр эшләү; | *У 2, У 3, З 2, З 3* | | | | |
| **IV бүлек. Синтаксис һәм пунктуация** | | | | | | |
| **Тема 4.1. Йыл миҙгелдәре. Һүҙбәйләнеш.** | **Практик эш№34:** һүҙәрҙән һүҙбәйләнештәр төҙөп яҙыу; | *У 1, У 3, З 1, З 3* | | | | |
| **Тема 4.2. Милли байрамдар. Һөйләм.** | **Практик эш№35:** һөйләмдең баш һәм эйәрсән киҫәктәрен табып яҙыу; | *У 6, У 7, З 7, З 6* | **Контроль эш№4.** Тема: “Һүҙ төркөмдәре (исем, ҡылым, рәүеш, сифат), ярҙамсы һүҙәр”. | *У 1, У 2, УЗ, З 1,З 2, З 3* | | |

**Зачет һорауҙары**

**I бүлек. Башҡорт теленең грамматикаһы.**

1. Башҡорт теле-дәүләт теле булараҡ.
1. Алфавит. Башҡорт теленең һуҙынҡы һәм тартынҡы өн-хәрефтәре.
2. Сингармонизм законы. Яҙыу ҡағиҙәләре.
3. Баҫым.
4. Һүҙҙең төҙөлөшө.
5. Һан.
6. Үҙ аллы һүҙ төркөмө - исем.
7. Башҡорт телендә ижек.
8. Килештәр.
9. Исемдәрҙең эйәлек заты категорияһы.
10. Исемдәрҙең хәбәрлек заты категорияһы.
11. Үҙ аллы һүҙ төркөмө – ҡылым.
12. Ҡылымдың хәҙерге заман формаһы.
13. Ҡылымдың киләсәк заман формаһы.
14. Ҡылымдың үткән заман формаһы.
15. Алмаш.
16. Үҙ аллы һүҙ төркөмө - сифат.
17. Сифат дәрәжәләре һәм төркөмсәләре.
18. Башҡорт телендә ярҙамсы һүҙҙәр:бәйләүестәр,теркәүестәр,киҫәксәләр.
19. Башҡорт телендә ярҙамсы һүҙҙәр: ымлыҡтар һәм мөнәсәбәт һүҙҙәр.
20. Һөйләм. Һөйләм төрҙәре.

**II бүлек. Башҡорт теленән телдән һөйләү өсөн темалар.**

1. Башҡорттар. Башҡорт теле.

1. Сәләм. Танышыу. Һинең хоббийың.
2. Минең визиткам. Үҙем тураһында.
3. Минең дуҫтарым.
4. Һиңә нисә йәш?Минең туғандарыма нисәшәр йәш?
5. Минең ғаиләм. Шәжәрә һүҙе нимәне аңлата?
6. Йорт һәм ҡырағай хайуандар һәм ҡоштар.
7. Көн тәртибе.
8. Минең яратҡан әкиәттәрем(1-2 һайлап һөйләргә).
9. Һин ҡайҙан? Мин Башҡортостандан.
10. Йыл миҙгелдәре.
11. Кеҫә телефоным.
12. Башҡорттарҙың милли байрамдары,кейемдәре.
13. Беҙҙең өй. Беҙҙең фатир.
14. Музыка ҡоралдары. Артистар.
15. Башҡортостан ҡалалары.
16. Ял итергә яратаһыңмы? Башҡортостанда ял йорттары, санаторийҙар.
17. Кейемдәр.
18. Һин ниндәй кеше? Һинең һөнәрең.
19. Яҙыусылар һәм шағирҙар.
20. Спортсмендар. Спорт уйындары.
21. Башҡортостанда театрҙар.
22. Минең халҡымдың ғөрөф-ғәҙәттәре һәм йолалары.
23. Минең республикам Башҡортостан. Башҡортостандың баш ҡалаһы - Өфө.
24. Башҡортостандың билдәле шәһестәре(С.Юлаев, М.Аҡмулла һ.б.).

## Инеш (входной) контроль

1. **Башҡорт алфавитында нисә хәреф (Сколько букв в башкирском языке):**
   а) 38 хәреф б) 42 хәреф в) 41 хәреф
2. **Ҡайһы рәттә һуҙынҡы өндәр генә бирелгән (В каком ряду даны только гласные звуки):**
   а) а,о,у,ы,ө,э,я,ә,е
   б) а,о,у,ы,е,ю,ү,ә,и
   в) а,о,ә,ө,и,ү,э,у,ы
3. **Ҡайһы рәттәге хәрефтәр икешәр өндө белдерә? (В каком ряду буквы обозначают два звука)?**
   а) е,ю,я,а,и; б) е,ё,ю,я; в) а,ә,э,и,о,ө,ү,у,ы
4. **Һаңғырау тартынҡылар ғына булған рәтте күрһәтегеҙ. (Покажите ряд с глухими согласными).**
   а) п,ф,к,ҡ,т,с,ҫ,ш,х,һ,ч,ц,щ
   б) б,в,г,ғ,д,ҙ,ж,з,й,л,м,н,ң,р
   в) Һаңғырау тартынҡылар ғына булған рәт юҡ.
5. **Яңғырау тартынҡылар ғына булған рәтте күрһәтегеҙ. (Покажите ряд с звонкими согласными).**
   а) п,ф,к,ҡ,т,с,ҫ,ш,х,һ,ч,ц,щ
   б) б,в,г,ғ,д,ҙ,ж,з,й,л,м,н,ң,р
   в) п,ф,к,ҡ,т,с,ҫ,ш,х,һ,ч,ц,щ,б,в,г
6. **Хәреф һаны өн һаны менән тап килгән һүҙҙе күрһәтегеҙ. (Покажите слово, в которым совпадает количество звуков и букв)**
   а) егерме б) юрған в) ашъяулыҡ
7. **Яҙ, юл һүҙҙәрендә ике хәреф, ә нисәшәр өн бар? (В этих словах 2 буквы, а сколько звуков)?**
   а) өсәр өн б) дүртәр өн в) бишәр өн
8. **Ҡарлуғас һүҙендә тартынҡы өндәр ҡайһылары? (Покажите согласные звуки в этом слове)?**
   а) 1,3,5,7 - се өндәр
   б) 1,3,4,6,8 - се өндәр
   в) 2,5,7 - се өндәр
9. **Һуҙынҡы өндән башланған һүҙҙе күрһәтегеҙ. (Покажите слово, которое начинается с гласных звуков).**
   а) яҙыусы б) әкиәт в) юлсы
10. **Тартынҡы өндән башланған һүҙҙе күрһәтегеҙ (Покажите слово, которое начинается с согласного звука).**
    а) үлән б) уҡыусы в) елән
11. **Асыҡ ижектән генә торған һүҙҙе күрһәтегеҙ (Покажите слово, которое состоит из открытого слога).**
    а) ҡала б) бүлмә в) ҡармаҡ
12. **Юрматы һүҙендә нисә һуҙынҡы, нисә тартынҡы өн бар? (Сколько гласных, сколько согласных звуков в этом слове?)**
    а) өс һуҙынҡы, өс тартынҡы
    б) ике һуҙынҡы, дүрт тартынҡы
    в) дүрт тартынҡы, өс һуҙынҡы
13. **Ябыҡ ижектәрҙән генә торған һүҙҙе күрһәтегеҙ (Покажите слово, которое состоит только из закрытых слогов).**
    а) болот б) өҫтәл в) ҡылым
14. **Һандуғастар һүҙендә баҫым ҡайһы ижеккә төшә? (Куда падает ударение в этом слове?)**
    а) тәүге ижеккә
    б) икенсе ижеккә
    в) өсөнсө ижеккә
    г) һуңғы ижеккә
15. **Һорау киҫәксәһе булған_һүҙҙәрҙә баҫым ҡайһы ижеккә төшә? (Если есть в слове вопросительная частица, ударение куда падает?)**
    а) беренсе ижеккә
    б) икенсе ижеккә
    в) һорау киҫәксәһе алдындағы ижеккә
16. **Предметтың иҫәбен, уның һаналыу тәртибен белдергән һүҙ нимә тип атала? (Какая часть речи обозначает количество, порядок предмета?)**
    а)һан б) сифат в)исем
17. **Бер, икешәр, үн биш һүҙҙәре ниндәй һүҙ төркөмөнә ҡарай? (Какой части речи относятся эти слова?)**
    а)сифат б) һан в)ҡылым
18. **Егет кешегә етмеш төрлө һөнәр ҙә аҙ һөйләмендә һанды табып, уның төркөмсәһен билдәләгеҙ (Найдите в этом предложении числительное, определите разряд числительного).**
    а)сама һаны
    б)төп һаны
    в)үлсәү һаны
19. **Составында рәт һаны булған һөйләмде күрһәтегеҙ. (Найдите предложение, где есть порядковое числительное)**
    а) Берәүҙән икәү яҡшы.
    б) Ете ҡат үлсә, бер ҡат киҫ.
    в) Мин икенсе булып килдем.
    г) Сәғәт өстә дәрес бөтә.

20. **Ябай һанды табығыҙ. (Найдите простое числительное)**

а) алтмыш ике
б) миллион
в) йөҙ ҙә биш
г) ун ике

**4. Контроль һәм практик эштәр үткәреү өсөн материалдар**

**I бүлек. Инеш. Башҡорт теле. Фонетика.**

**Практик эш №1. Тема: һөйләмдәр төҙөү.**

*1.Һүҙҙәрҙе тәржемә итергә:*

Китаптар, дәфтәр, ҡәләмдәр, алма, малайҙар, ҡыҙҙар, шәм, урман, үлән.

*2.Һөйләмдәр төҙөп яҙырға:*

Китаптар, дәфтәр, ҡәләмдәр, алма, малайҙар, ҡыҙҙар, шәм, урман, үлән.

Баһалау:
“5”-эш теүәл, хатаһыҙ үтәлгән (1 хата ).
“4”-эш теүәл, хатаһыҙ үтәлгән (2-3хата).
“3”-эш теүәл, хатаһыҙ үтәлгән (4-5хата)
“2”-5-тән артыҡ хата ебәрелгән.

**Практик эш№2. Тема: “Мин” хикәйә төҙөү.**

1) Хикәйә яҙыу өсөн әҙерлек текстары уҡыу;
2) Һорауҙарға яуап биреү;
3) Өлгө буйынса телдән хикәйә төҙөү;
4) Хикәйә яҙыу һәм тикшереү.

Баһалау:

Хикәйәнең төҙөлөүе, яҙылыуы 100балл менән баһалана:

- 86 – 100 балл – «5»;
- 70 – 85 балл – «4»;
- 51 – 69 балл – «3;
- 51 балдан түбән – «2».

Шулай уҡ үтелгән темалар буйынса грамматик хаталар ҙа иҫәпкә алына.

Ҡулланылған әҙәбиәт:
1.М.Ғ.Усманова, З.З.Солтанғолова Башҡорт теле –Өфө:Китап, 2015;
2.Усманова М.Г. Башкирско-русский и русско-башкирский словарь. – 2010.

**Практик эш №3. Тема: “Был кем?” темаһына диалог төҙөү.**

“Был кем” темаһына диалог төҙөр алдынан, 14 бит Усманова “Башҡорт теле” китабындағы диалогты уҡыу, анализлау, һорауҙарға яуап биреү:

-Был кем?
-Был Динар.
-Ә һин кем?
-Мин студент. Исемем – Тимур.
-Ә һин кем?
-Мин Нур булам. Мин дә студент.
-Нур, ә ул кем?
-Ул минең атайым – Билал Дауыт улы.
-Нур, ә ул кем?
-Әллә.
-Ә һин Риммамы?
-Эйе. Мин Римма.
-Ә һин Ильнурмы?
-Юҡ, мин Илнур түгел түгел, мин Артур.

Баһалау:
“5”-эш теүәл, хатаһыҙ үтәлгән (1 хата ).
“4”-эш теүәл, хатаһыҙ үтәлгән (2-3хата).
“3”-эш теүәл, хатаһыҙ үтәлгән (4-5хата)
“2”-5-тән артыҡ хата ебәрелгән.

Ҡулланылған әҙәбиәт:
1.М.Ғ.Усманова, З.З.Солтанғолова Башҡорт теле –Өфө:Китап, 2015;

2.Усманова М.Г. Башкирско-русский и русско-башкирский словарь. – 2010.

**Практик эш №4. Тема: һүҙҙәрҙе күсереп алыу.**

*1. "Сингармонизм законы" ҡағиҙәһенә ярашлы һүҙҙәрҙе күсереп яҙырға:*

Минең олатайым (ҡартатайым) – үҙенсәлекле шәхес. Ул инде оло (ҙур) кеше. Үҙе бик белемле (уҡымышлы, ғилемле), йыуаш (баҫалҡы). Берәүгә лә тауыш күтәреп (ҡысҡырып, аҡырып, баҡырып) бармай. Яратҡан (күңеленә ятҡан) шөғөлө – төрлө илдәргә сәйәхәт итеү (илдәр гиҙеү). Ҡайҙа ғыны булмаған ул! Уның эш кабинеты – торғаны бер музей. Төрлө илдәрҙән алып ҡайтылған (килтерелгән) сувенирҙар, китаптар…

*2. Ялғауҙар өҫтәп яҙырға:*

*Китап(тар/тәр), дәфтәр(ҙар/ҙәр), ҡәләм(дар/дәр), алма(лар/ләр), малай(ҙар/ҙәр), ҡыҙ(ҙар/ҙәр), шәм(дәр/дәр), урман(дар/дәр), үлән(дар/дәр).*

Баһалау:

"5"-эш теүәл, хатаһыҙ үтәлгән (1 хата ).

"4"-эш теүәл, хатаһыҙ үтәлгән (2-3хата).

"3"-эш теүәл, хатаһыҙ үтәлгән (4-5хата)

"2"-5-тән артыҡ хата ебәрелгән.

Ҡулланылған әҙәбиәт:

1.М.Ғ.Усманова, З.З.Солтанғолова Башҡорт теле –Өфө:Китап, 2015;

2.З.М.Ғәбитова, С.А.Таһирова Башҡорт теле (Ікурс) - Өфө:Китап, 2009.

3.Усманова М.Г. Башкирско-русский и русско-башкирский словарь. – 2010.

**Практик эш №5. Тема: "Минең дуҫым" темаһына хикәйә төҙөү.**

1) Хикәйә яҙыу өсөн әҙерлек текстары уҡыу;
2) Һорауҙарға яуап биреү;
3) Өлгө буйынса телдән хикәйә төҙөү;
4) Хикәйә яҙыу һәм тикшереү.

Өлгө өсөн текст Усманова М. "Башҡорт теле" 72-73биттәр.

Баһалау:

Хикәйәнең төҙөлөүе, яҙылыуы 100балл менән баһалана:

- 86 – 100 балл – «5»;
- 70 – 85 балл – «4»;
- 51 – 69 балл – «3;
- 51 балдан түбән – «2».

Шулай уҡ үтелгән темалар буйынса грамматик хаталар ҙа иҫәпкә алына.

Ҡулланылған әҙәбиәт:

1.М.Ғ.Усманова, З.З.Солтанғолова Башҡорт теле –Өфө:Китап, 2015;

2.Усманова М.Г. Башкирско-русский и русско-башкирский словарь. – 2010.

**Практик эш №6. Тема: "Уҡыу йорттары" текстан һүҙҙәрҙе яҙып алыу.**

*1. Һөйләмдәрҙе тәржемә итергә, ҡағиҙә буйынса һүҙҙәрҙе күсереп алырға:*

Донъялағы иң эҫе күл Ҡыҙыл диңгеҙ яры буйындағы Синай ярымутрауында урынлашҡан. Күлдең өҫтөндә йылылыҡ 16 градус булһа, 6метр тәрәнлектә ҡышын-6, ә йәйен 60 градусҡа ҡәҙәр эҫе. Күл диңгеҙҙән утыҙ метр алыҫлыҡта ята. Шуға күрә диңгеҙ һыуы ла үтеп инә. Тәрәнәйгән һайын һыуының тоҙлолоғо уртаса ике тапҡырға арта бара.

*2. Һөйләмдәрҙе тәржемә итергә, ҡағиҙә буйынса һүҙҙәрҙе күсереп алырға::*

Ер йөҙөндә иң ҙур күл-Каспий. Элек ул океан менән тоташҡан булған. Ҙурлығына һәм һыуының тоҙлолоғона ҡарап, уны диңгеҙ тип йөрөтәләр. Иң тәрән күл – Байкал. Уның иң тәрән урыны – 1620 метр. Оҙонлоғо-620, киңлеге 32-74 километр.

Баһалау:

"5"-эш теүәл, хатаһыҙ үтәлгән (1 хата ).

"4"-эш теүәл, хатаһыҙ үтәлгән (2-3хата).

"3"-эш теүәл, хатаһыҙ үтәлгән (4-5хата)

"2"-5-тән артыҡ хата ебәрелгән.

Ҡулланылған әҙәбиәт:

1.М.Ғ.Усманова, З.З.Солтанғолова Башҡорт теле –Өфө:Китап, 2015;

2.З.М.Ғәбитова, С.А.Таһирова Башҡорт теле (Ікурс) - Өфө:Китап, 2009.

3.Усманова М.Г. Башкирско-русский и русско-башкирский словарь. – 2010.

4.Таблица "Яҙыу ҡағиҙәләре".

**Практик эш №7. Тема: һүҙҙәрҙе ижектәргә бүлеү**
Күнегеүҙе эшләү ысулы:
Группа 3 төркөмгә бүленә.
Шиғырҙар таратып бирелә: уҡырға, тәржемә итергә, ижектәргә бүлергә, схемаһын эшләргә.
Текстар З.М.Ғәбитова, М.Г.Усманова "Башҡорт теле" китабынан алына.
1 төркөм: "Башҡорт теле" (5бит)
2 төркөм: "Матур Өфө ҡалаһы" (15бит)
3төркөм: "Тыуған ҡалама йыр" (19бит)
Баһалау:
"5"-эш теүәл, хатаһыҙ үтәлгән (1 хата ).
"4"-эш теүәл, хатаһыҙ үтәлгән (2-3хата).
"3"-эш теүәл, хатаһыҙ үтәлгән (4-5хата)
"2"-5-тән артыҡ хата ебәрелгән.
Ҡулланылған әҙәбиәт:
1.М.Ғ.Усманова, З.З.Солтанғолова Башҡорт теле –Өфө:Китап, 2015;
2.З.М.Ғәбитова, С.А.Таһирова Башҡорт теле (Ікурс) - Өфө:Китап, 2009.
3.Усманова М.Г. Башкирско-русский и русско-башкирский словарь. – 2010.
**Практик эш№8. Тема: баҫым ҡуйып, һүҙҙәрҙе күсереү.**
*1. Ҡағыҙға ярашлы күнегеүҙе үтәргә:*

Минең олатайым (ҡартатайым) – үҙенсәлекле шәхес. Ул инде оло (ҙур) кеше. Үҙе бик белемле (уҡымышлы, ғилемле), йыуаш (баҫалҡы). Берәүгә лә тауыш күтәреп (ҡысҡырып, аҡырып, баҡырып) бармай. Яратҡан (күңеленә яҡҡан) шөғөлө – төрлө илдәргә сәйәхәт итеү (илдәр гиҙеү).

Ҡайҙа ғыны булмаған ул! Уның эш кабинеты – торғаны бер музей. Төрлө илдәрҙән алып ҡайтылған (килтерелгән) сувенирҙар, китаптар…

*2. Ялғауҙар өҫтәп яҙырға һәм баҫым ҡуйырға:*
*Китап(тар/тәр), дәфтәр(ҙар/ҙәр), ҡәләм(дар/дәр), алма(лар/ләр), малай(ҙар/ҙәр), ҡыҙ(ҙар/ҙәр), шәм(дәр/дәр), урман(дар/дәр), үлән(дар/дәр).*
Баһалау:
"5"-эш теүәл, хатаһыҙ үтәлгән (1 хата ).
"4"-эш теүәл, хатаһыҙ үтәлгән (2-3хата).
"3"-эш теүәл, хатаһыҙ үтәлгән (4-5хата)
"2"-5-тән артыҡ хата ебәрелгән.
Ҡулланылған әҙәбиәт:
1.М.Ғ.Усманова, З.З.Солтанғолова Башҡорт теле –Өфө:Китап, 2015;
2.Усманова М.Г. Башкирско-русский и русско-башкирский словарь. – 2010.
**Практик эш №9. Тема: һандарҙы һүҙ менән яҙыу.**
*1.Һандарҙы һүҙ менән яҙырға:*
31, 1, 27, 327, 564, 12, 2014, 2008, 1/3, 2/6, 2,05.
*2.Һөйләмдәрҙе күсереп яҙырға һәм һандар аҫтына һыҙырға:*

Бер тырышлыҡ унлата ҡайта. Егет кешегә етмеш төрлө һөнәр ҙә аҙ. Бер ҡунаҡ – шатлыҡ, ике ҡунаҡ – артыҡ, өс ҡунаҡ- йөк. Бер көн ҡунаҡ булһаң, ҡырҡ көн сәләм бир. Ҡырҡ ҡат күлдәк кейгәнсе, бер ҡат тун кей. Мең алтын ташың булғансы, бер аҡыллы башың булһын.

Баһалау:
"5"-эш теүәл, хатаһыҙ үтәлгән (1 хата ).
"4"-эш теүәл, хатаһыҙ үтәлгән (2-3хата).
"3"-эш теүәл, хатаһыҙ үтәлгән (4-5хата)
"2"-5-тән артыҡ хата ебәрелгән.
Ҡулланылған әҙәбиәт:
1.М.Ғ.Усманова, З.З.Солтанғолова Башҡорт теле –Өфө:Китап, 2008;
2.З.М.Ғәбитова, С.А.Таһирова Башҡорт теле (Ікурс) - Өфө:Китап, 2009.
3.Усманова М.Г. Башкирско-русский и русско-башкирский словарь. – 2010.
4.Эш дәфтәрҙәре.
**Практик эш №10. Тема һандарҙың төркөмсәһен билдәләү.**
*1.Һөйләмдәрҙе күсереп яҙырға һәм һандарҙың төркөмсәһен билдәләргә:*

Бер тырышлыҡ унлата ҡайта. Егет кешегә етмеш төрлө һөнәр ҙә аҙ. Бер ҡунаҡ – шатлыҡ, ике ҡунаҡ – артыҡ, өс ҡунаҡ- йөк. Бер көн ҡунаҡ булһаң, ҡырҡ көн сәләм бир. Ҡырҡ ҡат күлдәк кейгәнсе, бер ҡат тун кей. Мең алтын ташың булғансы, бер аҡыллы башың булһын.
2. *Һандарҙың төркөмсәһен билдәләргә:*
З.М.Ғәбитова "Башҡорт теле" (Iкурс) 143 бит 4эш.
Баһалау:
"5"-эш теүәл, хатаһыҙ үтәлгән (1 хата ).
"4"-эш теүәл, хатаһыҙ үтәлгән (2-3хата).
"3"-эш теүәл, хатаһыҙ үтәлгән (4-5хата)
"2"-5-тән артыҡ хата ебәрелгән.
Ҡулланылған әҙәбиәт:
1.М.Ғ.Усманова, З.З.Солтанғолова Башҡорт теле –Өфө:Китап, 2015;
2.З.М.Ғәбитова, С.А.Таһирова Башҡорт теле (Iкурс) - Өфө:Китап, 2009.
3.Усманова М.Г. Башкирско-русский и русско-башкирский словарь. – 2010.
**Практик эш №11. Тема: һандарҙы дөрөҫләп яҙыу;**
*1. Һандарҙы һүҙ менән яҙырға:*
31, 1, 27, 327, 564, 12, 2014, 2008, 1/3, 2/6, 2,05.
*2. Һандарҙы дөрөҫләп, һүҙ менән яҙырға:*
Бер тырышлыҡ (10(лата)) ҡайта. Егет кешегә (70) төрлө һөнәр ҙә аҙ. (1) ҡунаҡ – шатлыҡ, (2) ҡунаҡ – артыҡ, (3) ҡунаҡ- йөк. (1) көн ҡунаҡ булһаң, (40) көн сәләм бир. (40) ҡат күлдәк кейгәнсе, (1) ҡат тун кей. (1000) алтын ташың булғансы, (1) аҡыллы башың булһын.
Баһалау:
"5"-эш теүәл, хатаһыҙ үтәлгән (1 хата ).
"4"-эш теүәл, хатаһыҙ үтәлгән (2-3хата).
"3"-эш теүәл, хатаһыҙ үтәлгән (4-5хата)
"2"-5-тән артыҡ хата ебәрелгән.
Ҡулланылған әҙәбиәт:
1.М.Ғ.Усманова, З.З.Солтанғолова Башҡорт теле –Өфө:Китап, 2008;
2.З.М.Ғәбитова, С.А.Таһирова Башҡорт теле (Iкурс) - Өфө:Китап, 2009.
3.Усманова М.Г. Башкирско-русский и русско-башкирский словарь. – 2010.

**Контроль эш №1. Тема:"Фонетика, лексика, һан".**

Күнегеү эшләү шарттары:
Ваҡыты: 2 сәғәт.

Вариант 1.

1.Башҡорт телендә нисә хәреф?
2.Ҡалын һуҙынҡыларҙы яҙығыҙ.
3.Нәҙек һуҙынҡыларҙы яҙығыҙ.
4.Башҡорт тартынҡыларын яҙырға.
5.Һорауҙарға яуап бирегеҙ: Һиңә нисә йәш? Һинең исемең нисек? Һин ҡайҙан?
6.Һандарҙы һүҙ менән яҙығыҙ: 26;12;1235;48;55;20;2,5;1,6;2,02.
7.Һандарҙың төрксәһен билдәләгеҙ: алтау, беренсе, ун, алтышар, унар, утыҙлап, өслө, дүртле.
8.Һандарҙы һүҙ менән яҙып, төркөмсә буйынса үҙгәртергә: 3; 6.

Вариант 2.

1.Башҡорт телендә нисә хәреф?
2.Ҡалын һуҙынҡыларҙы яҙығыҙ.
3.Нәҙек һуҙынҡыларҙы яҙығыҙ.
4.Башҡорт тартынҡыларын яҙырға.
5.Һорауҙарға яуап бирегеҙ: Һиңә нисә йәш? Һинең исемең нисек? Һин ҡайҙан?
6.Һандарҙы һүҙ менән яҙығыҙ: 25;56;24;584;102;2005;1,5;5,6;2,05.
7.Һандарҙың төрксәһен билдәләгеҙ: өсөнсө, егерме, берәү, етешәр, унышар, ҡырҡлап, бишле, ун.
8.Һандарҙы һүҙ менән яҙып, төркөмсә буйынса үҙгәртергә: 2; 9.

Вариант 3.
1.Башҡорт телендә нисә хәреф?
2.Ҡалын һуҙынҡыларҙы яҙығыҙ.
3.Нәҙек һуҙынҡыларҙы яҙығыҙ.
4.Башҡорт тартынҡыларын яҙырға.
5.Һорауҙарға яуап бирегеҙ: Һиңә нисә йәш? Һинең исемең нисек? Һин ҡайҙан?
6.Һандарҙы һүҙ менән яҙығыҙ: 28;654;102;2003;58;24;1,5;5,6;2,07.
7.Һандарҙың төрксәһен билдәләгеҙ: егермеләп, икенсе, егерменсе, туғыҙар, етешәр, унау, утыҙлаған, йөҙлө.
8.Һандарҙы һүҙ менән яҙып, төркөмсә буйынса үҙгәртергә: 1;6.

Вариант 4.
1.Башҡорт телендә нисә хәреф?
2.Ҡалын һуҙынҡыларҙы яҙығыҙ.
3.Нәҙек һуҙынҡыларҙы яҙығыҙ.
4.Башҡорт тартынҡыларын яҙырға.
5.Һорауҙарға яуап бирегеҙ: Һиңә нисә йәш? Һинең исемең нисек? Һин ҡайҙан?
6.Һандарҙы һүҙ менән яҙығыҙ: 56;28;654;201;2005;325;1,6;8,6;2,08.
7.Һандарҙың төркөмсәһен билдәләгеҙ: берәү, утыҙ, икенсе, унар, егермеләгән, етешәр, утыҙлап, алтылы.
8.Һандарҙы һүҙ менән яҙып, төркөмсә буйынса үҙгәртергә: 8;6.

Вариант 5.
1.Башҡорт телендә нисә хәреф?
2.Ҡалын һуҙынҡыларҙы яҙығыҙ.
3.Нәҙек һуҙынҡыларҙы яҙығыҙ.
4.Башҡорт тартынҡыларын яҙырға.
5.Һорауҙарға яуап бирегеҙ: Һиңә нисә йәш? Һинең исемең нисек? Һин ҡайҙан?
6.Һандарҙы һүҙ менән яҙығыҙ: 56;89;205;3005;451;25;236;2,5;5,7;2,08.
7.Һандарҙың төрксәһен билдәләгеҙ: унынсы, етәү, ун, һигеҙәр, унар, утыҙлап, бишле, алтылы.
8.Һандарҙы һүҙ менән яҙып, төркөмсә буйынса үҙгәртергә: 4;3.
Баһалау:
“5”-эш теүәл, хатаһыҙ үтәлгән (1 хата ).
“4”-эш теүәл, хатаһыҙ үтәлгән (2-3хата).
“3”-эш теүәл, хатаһыҙ үтәлгән (4-5хата)
“2”-5-тән артыҡ хата ебәрелгән.
Ҡулланылған әҙәбиәт:
1.М.Ғ.Усманова, З.З.Солтанғолова Башҡорт теле –Өфө:Китап, 2015;
2.З.М.Ғәбитова, С.А.Таһирова Башҡорт теле (Iкурс) - Өфө:Китап, 2009.
3.Усманова М.Г. Башкирско-русский и русско-башкирский словарь. – 2010.
**Үҙ аллы эш №1:** “Минең дуҫым” темаһына доклад яҙыу.
Доклад әҙерләүҙең шарттары:
1.Докладтың темаһы ныҡлап өйрәнелә, төрлө текстар уҡып, һорауҙарға яуап бирелә;
2.Библиотекала булган китаптар, журналдар ҡулланып, һөйләмдәр төҙөлә;
3.Йыйылған материалдарҙы ҡулланып “Минең дуҫым” темаһына хикәйә яҙыла;
4.Әҙерләнгән эш буйынса аудиторияла сығыш яһала.
<u>Баһалау:</u>
Докладтың төҙөлөүе, яҙылыуы 100балл менән баһалана:
- 86 – 100 балл – «5»;
- 70 – 85 балл – «4»;
- 51 – 69 балл – «3;
- 51 балдан түбән – «2».
Шулай уҡ үтелгән темалар буйынса грамматик хаталар ҙа иҫәпкә алына.
Ҡулланылған әҙәбиәт:
1.Китаптар: М.Ғ.Усманова, З.З.Солтанғолова Башҡорт теле;
2.З.М.Ғәбитова, С.А.Таһирова Башҡорт теле (1курс)
3.Усманова М.Г. Башкирско-русский и русско-башкирский словарь.
4.”Йәшлек” газетаһы.

**Үҙ аллы эш №2:** “Минең тыуған ерем” темаһына доклад әҙерләү.
Доклад әҙерләүҙең шарттары:
1.Докладтың темаһы ныҡлап өйрәнелә, төрлө текстар уҡып, һорауҙарға яуап бирелә;
2.Библиотекала булган китаптар, журналдар ҡулланып, һөйләмдәр төҙөлә;
3.Йыйылған материалдарҙы ҡулланып “Минең тыуған ерем” темаһына хикәйә яҙыла;
4.Әҙерләнгән эш буйынса төркөм алдында сығыш яһау.
<u>Баһалау:</u>
Докладтың төҙөлөүе, яҙылыуы 100балл менән баһалана:
- 86 – 100 балл – «5»;
- 70 – 85 балл – «4»;
- 51 – 69 балл – «3;
- 51 балдан түбән – «2».

Шулай уҡ үтелгән темалар буйынса грамматик хаталар ҙа иҫәпкә алына.
Ҡулланылған әҙәбиәт:
1.Китаптар: М.Ғ.Усманова, З.З.Солтанғолова Башҡорт теле;
2.Усманова М.Г. Башкирско-русский и русско-башкирский словарь.
4.”Йәшлек” газетаһы.
**Үҙ аллы эш №3:** өлгө буйынса “Минең бер көнөм” темаһына хикәйә төҙөү;
Хикәйә әҙерләүҙең шарттары:
1.Хикәйәнең темаһы ныҡлап өйрәнелә, төрлө текстар уҡып, һорауҙарға яуап бирелә;
2.Библиотекала булган китаптар, журналдар ҡулланып, һөйләмдәр төҙөлә;
3.Йыйылған материалдарҙы ҡулланып “Минең бер көнөм” темаһына хикәйә яҙыла;
4.Әҙерләнгән эш буйынса төркөм алдында сығыш яһау.
<u>Баһалау:</u>
Хикәйәнең төҙөлөүе, яҙылыуы 100балл менән баһалана:
- 86 – 100 балл – «5»;
- 70 – 75 балл – «4»;
- 51 – 69 балл – «3;
- 51 балдан түбән – «2».

Шулай уҡ үтелгән темалар буйынса грамматик хаталар ҙа иҫәпкә алына.
Ҡулланылған әҙәбиәт:
1.Китаптар: М.Ғ.Усманова, З.З.Солтанғолова Башҡорт теле;
2.З.М.Ғәбитова, С.А.Таһирова Башҡорт теле (1курс)
3.Усманова М.Г. Башкирско-русский и русско-башкирский словарь.

**II бүлек. Морфология. Үҙ аллы һүҙ төркөмдәре**
**Практик эш №12. Тема: өлгө буйынса һөйләмдәр төҙөп яҙыу.**

1. *Һөйләмдәрҙе тәржемә итеп, күсереп яҙырға:*

Минең әсәйем бик тырыш кеше. Ул мәктәптә балалар уҡыта. Әсәйем өйҙә лә күп эшләй: ашарға бешерә, бәйләй, кер йыуа. Әсәйем баҡсала эшләргә лә ярата. Мин уға ярҙам итәм.

2. *Дөрөҫ һөйләм төҙөгөҙ:*

Мин уҡыйым китап.

Гөлназ яҙа дәфтәргә.

Әсәй ҡоя ҡоймаҡ.

3. *Һүҙҙәр менән һөйләмдәр төҙөп яҙырға:*

Мәктәпкә, бесәйҙән, ҡояш, балаларҙың бүлмәһе, иҙән, ултырғыстан торҙо.

4. *Башҡорт теленә тәржемә итергә:*

15 яблок

23 ученика

11 классов

3 этажа……………………………

17 лет……………………………..

Баһалау:
“5”-эш теүәл, хатаһыҙ үтәлгән (1 хата ).

“4”-эш теүәл, хатаһыҙ үтәлгән (2-3хата).
“3”-эш теүәл, хатаһыҙ үтәлгән (4-5хата)
“2”-5-тән артыҡ хата ебәрелгән.
Ҡулланылған әҙәбиәт:
1.М.Ғ.Усманова, З.З.Солтанғолова Башҡорт теле –Өфө:Китап, 2015;
2.Усманова М.Г. Башкирско-русский и русско-башкирский словарь. – 2010.

**Практик эш №13. Тема: өлгө буйынса һүҙҙәргә ялғауҙар яҙыу.**

*1. Ялғауҙар өҫтәп яҙырға:*
*Китап(тар/тәр), дәфтәр(ҙар/ҙәр), ҡәләм(дар/дәр), алма(лар/ләр), малай(ҙар/ҙәр), ҡыҙ(ҙар/ҙәр), шәм(дәр/дәр), урман(дар/дәр), үлән(дар/дәр).*
*2. Һүҙҙәрҙе ижектәргә бүлеп яҙырға һәм схемаһын эшләргә:*
Баһалау:
“5”-эш теүәл, хатаһыҙ үтәлгән (1 хата ).
“4”-эш теүәл, хатаһыҙ үтәлгән (2-3хата).
“3”-эш теүәл, хатаһыҙ үтәлгән (4-5хата)
“2”-5-тән артыҡ хата ебәрелгән.
Ҡулланылған әҙәбиәт:
1.М.Ғ.Усманова, З.З.Солтанғолова Башҡорт теле –Өфө:Китап, 2015;
2.З.М.Ғәбитова, С.А.Таһирова Башҡорт теле (Iкурс) - Өфө:Китап, 2009.
3.Усманова М.Г. Башкирско-русский и русско-башкирский словарь. – 2010.
4.Таблица “Исемдәрҙең һан менән үҙгәреше”.

**Практик эш №14. Тема: өлгө буйынса һүҙҙәрҙе зат менән үҙгәртеү.**

*1.З.М.Ғәбитова “Башҡорт теле” 54-55 биттәр* текстарҙан эйәлек затындағы һүҙҙәрҙе күсереп яҙырға.
*2.Һөйләм төҙөргә:*
Бесән, ем, сәй, аҡыл.
*3.Һүҙҙәрҙе эйәлек затында үҙгәртергә:*
Көн, ял, өй.
Баһалау:
“5”-эш теүәл, хатаһыҙ үтәлгән (1 хата ).
“4”-эш теүәл, хатаһыҙ үтәлгән (2-3хата).
“3”-эш теүәл, хатаһыҙ үтәлгән (4-5хата)
“2”-5-тән артыҡ хата ебәрелгән.
Ҡулланылған әҙәбиәт:
1.М.Ғ.Усманова, З.З.Солтанғолова Башҡорт теле –Өфө:Китап, 2015;
2.З.М.Ғәбитова, С.А.Таһирова Башҡорт теле (Iкурс) - Өфө:Китап, 2009.
3.Усманова М.Г. Башкирско-русский и русско-башкирский словарь. – 2010.
4.Таблица “Эйәлек заты ялғауҙары”.

**Практик эш №15. Тема: һүҙҙәргә ялғауҙар өҫтәп яҙыу;**

*1. Ялғауҙар өҫтәп яҙырға:*
*Китап(тар/тәр), дәфтәр(ҙар/ҙәр), ҡәләм(дар/дәр), алма(лар/ләр), малай(ҙар/ҙәр), ҡыҙ(ҙар/ҙәр), шәм(дәр/дәр), урман(дар/дәр), үлән(дар/дәр).*
*2. Эйәлек заты ялғауҙарын яҙығыҙ:*
Өҫтәл, машина, аяҡ, гәзитә, турғайҙар, олатай, итек, атай, дәфтәр, фотоаппарат, уҡытыусы, сәскә, ултырғыс, әсәй.
*3. Хәбәрлек заты ялғауҙарын яҙығыҙ:*
Олатай, атай, уҡытыусы, әсәй, уҡыусы, өләсәй, апай, ағай.
Баһалау:
“5”-эш теүәл, хатаһыҙ үтәлгән (1 хата ).
“4”-эш теүәл, хатаһыҙ үтәлгән (2-3хата).
“3”-эш теүәл, хатаһыҙ үтәлгән (4-5хата)
“2”-5-тән артыҡ хата ебәрелгән.
Ҡулланылған әҙәбиәт:
1.М.Ғ.Усманова, З.З.Солтанғолова Башҡорт теле –Өфө:Китап, 2015;
2.З.М.Ғәбитова, С.А.Таһирова Башҡорт теле (Iкурс) - Өфө:Китап, 2009.
3.Усманова М.Г. Башкирско-русский и русско-башкирский словарь. – 2010.
4.Таблица “Хәбәрлек заты ялғауҙары”.

**Практик эш №16. Тема: бирелгән һүҙҙәрҙе килеш менән үҙгәртеү.**
*1. Килеш менән үҙгәртеп яҙырға:*
Өҫтәл, машина, аяҡ, олатай, итек, атай, дәфтәр, сәскә, ултырғыс, әсәй.
*2. Ҡара хәрефтәр менән яҙылған һүҙҙәрҙең килештәрен билдәләргә:*
**Йөрәктән** сыҡҡан һүҙ **йөрәккә** етә. **Аҡыл** менән йәшәүсенең минуты ла ҡәҙерле. Алаһы нәмә **алтын** булып күренә. Үлер ваҡыты етһә, **себендең** мороно үткерләнер. Йығылған **ағаска** балта менән сабыуы күп була. Йырланмаған **йыр,** һөйләнмәгән көләмәс ҡалманы. Ирҙәр **ҡатын-ҡыҙҙарҙы** яҡлаусы булырға тейеш. Ҡалған **эшкә** ҡар яуа.

Баһалау:
“5”-эш теүәл, хатаһыҙ үтәлгән (1 хата ).
“4”-эш теүәл, хатаһыҙ үтәлгән (2-3хата).
“3”-эш теүәл, хатаһыҙ үтәлгән (4-5хата)
“2”-5-тән артыҡ хата ебәрелгән.

Ҡулланылған әҙәбиәт:
1.М.Ғ.Усманова, З.З.Солтанғолова Башҡорт теле –Өфө:Китап, 2015;
2.З.М.Ғәбитова, С.А.Таһирова Башҡорт теле (Iкурс) - Өфө:Китап, 2009.
3.Усманова М.Г. Башкирско-русский и русско-башкирский словарь. – 2010.
4.Таблица “Килеш һорауҙары” “Килеш ялғауҙары”.

**Үҙ аллы эш №4: Тема:** өлгө буйынса “Минең ғаиләм” темаһына хикәйә төҙөү.
Хикәйә яҙыу шарттары:
1.Хикәйәнең темаһы ныҡлап өйрәнелә, төрлө текстар уҡып, һорауҙарға яуап бирелә;
2.Библиотекала булган китаптар, журналдар ҡулланып, һөйләмдәр төҙөлә;
3.Йыйылған материалдарҙы ҡулланып “Минең ғаиләм” темаһына хикәйә яҙыла;
4.Әҙерләнгән эш буйынса төркөм алдында сығыш яһау.
Усманова М.Ғ. Башҡорт теле 25-26биттәр. Өлгө буйынса хикәйә яҙырға.

Минең ғаиләм.

Минең исемем Ләлә. Мин беренсе курста уҡыйым. Миңә ун алты йәш. Минең әсәйем, атайым, апайым, ҡустым һәм һеңлем бар.

Әсәйемдең исеме Асия. Уға 41 йәш. Ул балалар баҡсаһында тәрбиәсе булып эшләй.

Атайымдың исеме Таһир. Уға 45 йәш. Ул таксист булып эшләй.

Апайымдың исеме Лилиә. Ул врач булып эшләй. Уға 23 йәш. Ул эшен бик ярата.

Ҡустым – Айнур. Уға 7 йәш. Ул беренсе класта уҡый. Һеңлемә 10 йәш. Уның исеме Айгөл. Ул мәктәптә өсөнсө класта уҡый.

Мин ғаиләмде бик яратам.

Баһалау:
Хикәйәнең, докладтың төҙөлөүе, яҙылыуы 100балл менән баһалана:
- 86 – 100 балл – «5»;
- 70 – 85 балл – «4»;
- 51 – 69 балл – «3;
- 51 балдан түбән – «2».

Шулай уҡ үтелгән темалар буйынса грамматик хаталар ҙа иҫәпкә алына.
Ҡулланылған әҙәбиәт:
1.М.Ғ.Усманова, З.З.Солтанғолова Башҡорт теле –Өфө:Китап, 2015;
2.З.М.Ғәбитова, С.А.Таһирова Башҡорт теле (Iкурс) - Өфө:Китап, 2009.
3.Усманова М.Г. Башкирско-русский и русско-башкирский словарь. – 2010.
4.Башҡорт теле.ru: уҡыу өсөн текстар. (Ф.Ғ.Хисамитдинова текстар йыйынтығы).

**Үҙ аллы эш №5. Тема:** “Минең визиткам” - визит карточкалары әҙерләү, өлгө буйынса автобиография яҙыу.
1. Өлгө буйынса визитка төҙөп яҙырға.

| | |
|---|---|
| Фәритова Сәлимә Сәлим ҡыҙы<br>тәржемәсе | |
| Өй: 450055, Өфө Октябрь проспекты, 50-76<br>Тел: 31-60-18 | Эш: 450000, Өфө Ленин урамы, 22<br>Тел: 22-45-76 |

2. Усманова М.Ғ. Башҡорт теле 262 бит. Өлгө буйынса автобиография яҙырға.
Баһалау:

“5”-эш теүәл, хатаһыҙ үтәлгән (1 хата ).
“4”-эш теүәл, хатаһыҙ үтәлгән (2-3хата).
“3”-эш теүәл, хатаһыҙ үтәлгән (4-5хата)
“2”-5-тән артыҡ хата ебәрелгән.
Ҡулланылған әҙәбиәт:
1.М.Ғ.Усманова, З.З.Солтанғолова Башҡорт теле –Өфө:Китап, 2015;
2.Усманова М.Г. Башкирско-русский и русско-башкирский словарь. – 2010.
3.Ф.Ғ.Хисамитдинова Башҡорт теле.ru китабы.
**Үҙ аллы эш №6. Тема: “Тән өлөштәре” темаһына һорауҙарға яуап бирергә**.
1. *“Тән өлөштәре” темаһына һорауҙарға яуап бирергә.*
Һин сәғәт нисәлә тораһың? Иртәнге ашты сәғәт нисәлә ашайһың? Мәктәптә дәрестәр ҡасан башлана? Буш ваҡытыңда нимә эшләйһең? Сәғәт нисәлә йоҡларға ятаһың?
*2. “Тән өлөштәре”шиғырын ятлау.*
Был минең башым,
Сәсем, сәстәрем,
Күҙҙәр, күҙҙәрем
Ә был ҡаштарым.
Ҡолаҡ – ҡолаҡтар,
Биттәр – биттәрем
Ынйылай йылтырай
Минең күҙҙәрем.
Ҡулым – ҡулдарым,
Ә был бармаҡтар,
Тыпырлап бейей –
Минең аяҡтар.
Баһалау:
“5”-эш теүәл, хатаһыҙ үтәлгән (1 хата ).
“4”-эш теүәл, хатаһыҙ үтәлгән (2-3хата).
“3”-эш теүәл, хатаһыҙ үтәлгән (4-5хата)
“2”-5-тән артыҡ хата ебәрелгән.
Ҡулланылған әҙәбиәт:
1.Усманова М.Г. Башкирско-русский и русско-башкирский словарь. – 2010.
2.С.А.Тагирова, Э.Ю.Тулумбаева Интенсивный курс обучения башкирскому языку учащегося русских школ.
**Үҙ аллы эш №7. Тема: яраткан әкиәтте уҡып, һөйләргә әҙерләнеү.**
Эш төрҙәре:
1) Халыҡ әкиәте һайларға;
2) Әкиәтте уҡырға һәм тәржемә итергә;
3) Һөйләргә өйрәнергә.
Баһалау:
“5”-эш теүәл, хатаһыҙ үтәлгән (1 хата ).
“4”-эш теүәл, хатаһыҙ үтәлгән (2-3хата).
“3”-эш теүәл, хатаһыҙ үтәлгән (4-5хата)
“2”-5-тән артыҡ хата ебәрелгән.
Ҡулланылған әҙәбиәт:
1.Х.А.Толомбаев Башҡорт теле 17бит, 37бит, 95-102биттәр.
2.Төрлө әкиәт китаптары, газета-журналдар ҡулланыла.
**Үҙ аллы эш №8:** “Спортсмендар” темаһына реферат яҙыу.
Реферат – яҙма рәүештә бирелгән темаға мәғлүмәт еткереү.
Реферат әҙерләүҙең шарттары:
1. Бирелгән теманы ныҡлап өйрәнеп, анларға, төрлө текстар уҡып, һорауҙарға яуап бирелә.
2. Кәрәкле урындарҙы билдәләп, яҙып алына.
3. Реферат яҙыу буйынса план төҙөлә.
4. Йыйылған материалдарҙы туплап, реферат яҙыла.
5. Әҙер эште уҡыу, анализлау, дөрөҫләү.
6. Ҡағиҙә буйынса яҙма эште тәртипкә килтереү.

Реферат яҙыуҙың яҡынса структураһы:
1.Титуль бите.
2.Эштең яҙмаһы.
3.Ҡулланылған әҙәбиәт.

<u>Баһалау:</u>

Рефераттың төҙөлөүе, яҙылыуы 100балл менән баһалана:

- 86 – 100 балл – «5»;
- 70 – 85 балл – «4»;
- 51 – 69 балл – «3;
- 51 балдан түбән – «2».

Шулай уҡ үтелгән темалар буйынса грамматик хаталар ҙа иҫәпкә алына.

Ҡулланылған әҙәбиәт:

1.М.Ғ.Усманова, З.З.Солтанғолова Башҡорт теле –Өфө:Китап, 2015;
2.Усманова М.Г. Башкирско-русский и русско-башкирский словарь. – 2010.
3.Ф.Ғ.Хисамитдинова Башҡорт теле.ru китабы.
4.Интернеттан алынған материалдар.

**Контроль эш №2. Тема:"Фонетика, һан, исем".**

Эшләү ваҡыты: 2 сәғәт.
Күнегеүҙе эшләү ысулы: аңлатма бирелә, һорауҙарға яуап биреү.

**Вариант1.**

1. **Нөктәләр урынына тейешле хәрефтәр ҡуйығыҙ (Вставьте нужные буквы вместо точек):**

Бал., мәкт.п, ҡу., .ғай, ә.әй, а.бур, биҙр., .шәк, у.ыусы, ҡ.ләм, .ләсәй, башҡор. Теле, м.ҡәл, аш.ана. дары.хана.

2. **Бирелгән һүҙҙәргә күплек ялғауҙарын яҙығыҙ (К данным словам напишите окончания множественного числа):**

Журнал, ручка, ултырғыс, дәрес, уҡыусы, дәфтәр, ҡәләм, аҡбур, көндәлек, уҡытыусы, тәҙрә, ишек, глобус.

3. **Һандарҙы һүҙ менән яҙығыҙ (Напишите числительные словами):**

326, 32, 123, 10, 2009, 2018. 660. 698, 50, 700, 2054, 8000.

4. **Эйәлек заты ялғауҙарын яҙығыҙ (Напишите окончания принадлежности):**

Өҫтәл, машина, аяҡ, гәзитә, турғайҙар, олатай, итек, атай, дәфтәр, фотоаппарат, уҡытыусы, сәскә, ултырғыс, әсәй.

5. **Һөйләмдәр төҙөгөҙ (Составьте предложения):**

   1. Башҡортостан, йәшәй, мин.
   2. Беләә, башҡорт телен, яҡшы.
   3. Мин, уҡыйым, өсөнсө курста.
   4. Ағиҙел, бик,йылға, матур.
   5. Башҡорт, дуҫ, халҡы, йәшәй.

**Вариант2.**

**1. Нөктәләр урынына тейешле хәрефтәр ҡуйығыҙ (Вставьте нужные буквы вместо точек):**

Ҡал., м.ктәп, ҡ.т, .пай, а.ай, а.бур, тәҙр., .шек, у.ытыусы, ҡ.ләм, өл.сәй, баш.орт теле, мәҡ.л, китап.ана. ашхa.а.

**2. Бирелгән һүҙҙәргә күплек ялғауҙарын яҙығыҙ (К данным словам напишите окончания множественного числа):**

Дәрес, мәктәп, уҡыусы, китап, дәфтәр, ҡәләм, аҡбур, синыф етәксеһе, көндәлек, уҡытыусы, гөл, парта.

**3. Һандарҙы һүҙ менән яҙығыҙ (Напишите числительные словами):**

322, 12, 23, 103, 1008, 2008. 650. 688, 40, 500, 2029, 5000.

**4. Эйәлек заты ялғауҙарын яҙығыҙ (Напишите окончания принадлежности):**

Компьютер, машина, балыҡ, журналдар, ҡарғалар, өләсәй, быйма, атай, дискеттар, фотоаппарат, уҡытыусы, гөл, парта, әсәй.

**5. Һөйләмдәр төҙөгөҙ (Составьте предложения):**

6. Бик, Башҡортостан, ярата, мин.
7. Яҡшы, белә, республика.
8. Мин, район, төньяҡ, йәшәй.
9. Ямантау, бейек, иң, тау.
10. Ил, дуҫлыҡ, мин, йәшәй.

Баһалау:
“5”-эш теүәл, хатаһыҙ үтәлгән (1 хата ).
“4”-эш теүәл, хатаһыҙ үтәлгән (2-3хата).
“3”-эш теүәл, хатаһыҙ үтәлгән (4-5хата)
“2”-5-тән артыҡ хата ебәрелгән.
Ҡулланылған әҙәбиәт:
1.М.Ғ.Усманова, З.З.Солтанғолова Башҡорт теле –Өфө:Китап, 2015;
2.З.М.Ғәбитова, С.А.Таһирова Башҡорт теле (Iкурс) - Өфө:Китап, 2009.
3.Усманова М.Г. Башкирско-русский и русско-башкирский словарь. – 2010.
4.Таблицалар “Исемдәрҙең һан менән үҙгәреше”, “Эйәлек заты ялғауҙары”, “Хәбәрлек заты ялғауҙары”.

**Практик эш №17. Тема: ҡылымдарға һорауҙар яҙыу, күнегеүҙәр эшләү.**

*1.Түбәндәге ҡылымдарҙың заманын билдәләгеҙ.*

Барҙы,барған,барыр,ҡайтты,ҡайтҡан,ҡайтыр, килде, килгән, килер, уҡыр, йүгерҙе, һөрә, эшләне, килә, оҙата, өйрәтте, уҡый, оҙатты, уҡыны, йүгерә, һөрҙө, йүгерер, өйрәтә, һөрөр, бара, эшләр, килде, оҙатыр, барҙы, эшләй, килер, өйрәтер.

*2.Һөйләмдәрҙе күсереп яҙырға, ҡылымдары табып, һорауҙар бирергә.*

Ҡайғыр ҙа һин, ҡыуана ла бел. Кәрзинкә үрһендәр, балыҡ тотһондар. Яңы сорт иртә һәм тигеҙ өлгөрһөн. Эшлә, һора, бел, өйрән. Ғүмерегеҙҙең иң күңелле мәлдәре хаҡында уйларға тырышығыҙ. Күп бел, аҙ һөйлә. Тимерҙе ҡыҙыуында һуҡ.

Баһалау:
“5”-эш теүәл, хатаһыҙ үтәлгән (1 хата ).
“4”-эш теүәл, хатаһыҙ үтәлгән (2-3хата).
“3”-эш теүәл, хатаһыҙ үтәлгән (4-5хата)
“2”-5-тән артыҡ хата ебәрелгән.
Ҡулланылған әҙәбиәт:
